Документ подписан простой электронной подписью
Информация о владельце:
ФИО: Сыров Игорь Анатольевич
Должность: Директор
Дата подписания: 27.06.2022 16:33:19
Уникальный программный ключ:
b683afe664d7e9f64175886cf9626a198149ad36

СТЕРЛИТАМАКСКИЙ ФИЛИАЛ
ФЕДЕРАЛЬНОГО ГОСУДАРСТВЕННОГО БЮДЖЕТНОГО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОГО
УЧРЕЖДЕНИЯ ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ
«БАШКИРСКИЙ ГОСУДАРСТВЕННЫЙ УНИВЕРСИТЕТ»

Факультет *__Башкирской и тюркской филологии__*
Кафедра *__Башкирской филологии__*

# Аннотация рабочей программы дисциплины (модуля)

дисциплина *__Б1.В.15 Литература родственных (тюркских) народов__*

часть, формируемая участниками образовательных отношений

Направление

*__44.03.05__* *__Педагогическое образование (с двумя профилями подготовки)__*
код наименование направления

Программа

*__Родной (башкирский) язык и литература, Иностранный язык__*

Форма обучения

**Очная**

Для поступивших на обучение в
**2019 г.**

Стерлитамак 2022

**1. Перечень планируемых результатов обучения по дисциплине, соотнесенных с установленными в образовательной программе индикаторами достижения компетенций**

| Формируемая компетенция (с указанием кода) | Код и наименование индикатора достижения компетенции | Результаты обучения по дисциплине (модулю) |
|---|---|---|
| ПК-4. Способен проектировать индивидуальные образовательные маршруты обучающихся по преподаваемым учебным предметам | ПК-4.1. Знает способы разработки индивидуально ориентированных учебных материалов по родному языку и литературе с учетом индивидуальных особенностей обучающихся, их особых образовательных потребностей | Обучающийся должен знать содержание и художественные особенности произведений литературы родственных народов. |
| | ПК-4.2. Умеет проектировать индивидуальные образовательные модели урочной и внеурочной деятельности по преподаваемым учебным предметам с ориентацией на достижение личностных результатов | Обучающийся должен: уметь характеризовать художественный мир писателя, своеобразие его мировоззрения. |
| | ПК-4.3. Владеет навыками применения различных средств оценивания индивидуальных достижений обучающихся при изучении родного языка и литературы | Обучающийся должен: Владеть навыками литературоведческого анализа художественных текстов литературы родственных народов. |
| ПК-2. Способен выделять структурные элементы, входящие в систему познания предметной области (в соответствии с профилем и уровнем обучения), анализировать их в единстве содержания, формы и выполняемых функций | ПК-2.1. Способен выделять структурные элементы, входящие в систему познания предметной области (в соответствии с профилем и уровнем обучения), анализировать их в единстве содержания, формы и выполняемых функций | Обучающийся должен знать основные закономерности литературного процесса |
| | ПК-2.2. Обучающийся должен уметь находить структурные элементы, входящие в систему познания предметной области, анализировать, синтезировать, применять системный подход в соответствии с поставленными задачами. | Уметь анализировать художественные произведения литературы родственных народов. |
| | ПК-2.3. Владеет навыками | Обучающийся должен |

| | | |
|---|---|---|
| | анализа и интерпретации литературных и языковых явлений в единстве содержания, формы и выполняемых функций | владеть навыками анализа литературных произведений различных видов и жанров |

## 2. Цели и место дисциплины (модуля) в структуре образовательной программы

Цели изучения дисциплины:
Дисциплина «Литература родственных (тюркских) народов» относится к части, формируемой участниками образовательных отношений.
Дисциплина изучается на 2 курсе(ах) в 3 семестре.
Цели изучения дисциплины:
1. сформировать у студентов знания о литературе родственных (тюркских) народов и готовности к их применению в практической деятельности;
2. сформировать понятие об этапах становления литературы и современном состоянии литературы тюркских народов;
3. научить студентов применять полученные знания для решения задач профессиональной деятельности.

Дисциплина изучается на 2 курсе в 3 семестре

## 3. Объем дисциплины (модуля) в зачетных единицах с указанием количества академических или астрономических часов, выделенных на контактную работу обучающихся с преподавателем (по видам учебных занятий) и на самостоятельную работу обучающихся

Общая трудоемкость (объем) дисциплины составляет 2 зач. ед., 72 акад. ч.

| Объем дисциплины | Всего часов |
|---|---|
| | Очная форма обучения |
| Общая трудоемкость дисциплины | 72 |
| Учебных часов на контактную работу с преподавателем: | |
| лекций | 10 |
| практических (семинарских) | 22 |
| другие формы контактной работы (ФКР) | 0,2 |
| Учебных часов на контроль (включая часы подготовки): | |
| зачет | |
| Учебных часов на самостоятельную работу обучающихся (СР) | 39,8 |

| Формы контроля | Семестры |
|---|---|
| зачет | 3 |

## 4. Содержание дисциплины (модуля), структурированное по темам (разделам) с указанием отведенного на них количества академических часов и видов учебных занятий

### 4.1. Разделы дисциплины и трудоемкость по видам учебных занятий (в академических часах)

| № | Наименование раздела / | Виды учебных занятий, включая |
|---|---|---|

| п/п | темы дисциплины | самостоятельную работу обучающихся и трудоемкость (в часах) | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | Контактная работа с преподавателем | | | СР |
| | | Лек | Пр/Сем | Лаб | |
| **2** | **Литература тюркских народов** | **4** | **10** | **0** | **19** |
| 2.1 | Туркменская, балкарская, чувашская литература | 2 | 4 | 0 | 4 |
| 2.2 | Развитие узбекской литературы | 0 | 2 | 0 | 5 |
| 2.3 | Карагалпакская, азербайджанская литературы | 2 | 4 | 0 | 4 |
| 2.4 | Литературные взаимосвязи тюркских народов | 0 | 0 | 0 | 6 |
| **1** | **Истоки литературного наследия** | **6** | **12** | **0** | **20** |
| 1.1 | Истоки литератур тюркских народов | 2 | 0 | 0 | 0 |
| 1.2 | Эпосы тюрских народов. | 4 | 0 | 0 | 5 |
| 1.3 | Казахская национальная литература. | 0 | 2 | 0 | 5 |
| 1.4 | Киргизская литература. Творчество Ч. Айтматова | 0 | 4 | 0 | 5 |
| 1.5 | Особенности развития татарской литературы | 0 | 4 | 0 | 0 |
| 1.6 | Якутская и алтайская литература | 0 | 2 | 0 | 5 |
| | **Итого** | **10** | **22** | **0** | **39** |

### 4.2. Содержание дисциплины, структурированное по разделам (темам)

Курс практических/семинарских занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **2** | **Литература тюркских народов** | |
| 2.1 | Туркменская, балкарская, чувашская литература | Балҡар халҡы әҙәбиәтенең совет власы осоронда балҡар телендәге әлифба килеп сығыу менән барлыҡҡа килеүе. Балҡар әҙәбиәтенең үҙенең үсешендә халыҡ шиғриәте традицияларына һәм рус әҙәбиәте тәжрибәһенә таяныуы. Шиғриәттең төп роль уйнауы. К. Мечиевтың революцияға тиклемге йырҙарҙа һәм поэмаларҙа балҡар халҡының ғазап сигеүҙәрен һәм көрәшен кәүҙәләндереүе, совет власы дәүерендәге шиғырҙар хеҙмәткә һәм балкарҙарҙың көнкүрешенә, халыҡ дуҫлығына арналыуы. К. Кулиевтың поэзияһына гражданлыҡ, лиризмдың хас булыуы. Уның әҫәрҙәрендә халыҡтың тарихи һәм рухи тәжрибәһе сағылыуы. Хәҙерге балҡар шиғриәтенә К. Отаров, С. Макитов, Т. Зомаҡулованың ҙур өлөш индереүе. Уларҙың әҫәрҙәрендә лирик геройҙар замандаштың донъя һәм заман менән ҡатмарлы, күп яҡлы бәйләнешен кәүҙәләндереүе. |

| | | |
|---|---|---|
| 2.2 | Развитие узбекской литературы | Үзбәк әҙәбиәте формалашыуы. Үзбәк әҙәбиәтенең хәҙерге заманда торошо. Башҡорт һәм үзбәк әҙәби-мәҙәни бәйләнештәре. данлыҡлы үзбәк яҙыусылары, фольклорсылары, әҙәбиәт белгестәре |
| 2.3 | Карагалпакская, азербайджанская литературы | Ҡарағалпаҡ әҙәбиәтенә байҡау.<br>Әзербайжан әҙәбиәтенә байҡау.<br>Балҡар әҙәбиәте үҫеше.<br>Балҡар әҙәбиәте классигы Ҡайсын Кулиев ижады. «Ғәжәпләнеү йәшәү», «Эльбрус», «Һыбай», «Бейеклек бит күренә йыраҡтарҙан…», «Һабаҡ алдым ерҙән, күктән дә мин…», «Ҡылыс һәм сәскә», «Көндән-көн юл ауырлаша бара…», «Чегемда ҡар яуа», «Сыҙамлыҡ», «Аҡ ҡарҙа ҡара ат йән бирә», «Ҡояшҡа рәхмәт әйтәм» һ.б. шиғырҙарының лирик-философик асылы. |
| **1** | **Истоки литературного наследия** | |
| 1.3 | Казахская национальная литература. | 1. Ҡаҙаҡ әҙәбиәте үҫешенә байҡау (поэзия, проза, драматургия)<br>2. Абай Ҡонанбаевтың тормош һәм ижад юлы:<br>1) биографик мәғлүмәттәр;<br>2) Абай шиғриәтенең идея-тематик даирәһе, шағирҙың форма йәһәтенән төрки халыҡтары шиғриәтенә индергән яңылыҡтары;<br>3) Абайҙың «Мәсғүт», «Искәндәр» поэмаларының сюжет-композиция үҙенсәлектәре, поэтик деталдәрҙең символик мәғәнәһе;<br>4) «Хикмәтле һүҙ» сәсмә әҫәренең жанр тәбиғәте, мәғрифәтселек идеяларының сағылышы.<br>5. Ҡаҙаҡ прозаһында хикәйә жанры.<br> «Абай ере» хикәйәләр йыйынтығынан бер хикәйәгә идея-тематик йөкмәткеһе, сюжет-композиция үҙенсәлектәре, образдар системаһы һ.б. буйынса яҙма анализ.<br>6. Мохтар Ауэзовтың “Абай юлы” романының идея-тематик йөкмәткеһе, Абай образының һүрәтләнеше. |
| 1.4 | Киргизская литература. Творчество Ч. Айтматова | Ҡырғыҙ халыҡ яҙыусыһы Сыңғыҙ Торекул улы Айытматов. Әҙиптең тормош юлы. Ижтимағи эшмәкәрлеге. Ваҡытлы матбуғатта баҫылған мәкәләләрҙә, интервьюларҙа С. Айытматовтың донъяға ҡараштарының, әҙәбиәт хаҡында фекерҙәренең сағылышы.<br>С. Айытматовтың ижад юлы. Уның, тәнҡитсе Г. Гачев билдәләгәнсә, дүрт дәүергә бүленеше:<br>1. 1957 – 1962 йылдар – тормошта үҙ юлын табырға ынтылыусы, йәмғиәт тәртиптәренә ҡаршы сыҡҡан йәш геройҙы кәүҙәләндергән “тауҙар һәм далалар повестары” : “Йөҙгә йөҙ”, “Йәмилә”, “Дөйә күҙе”, “Ҡыҙыл яулыҡлы тирәккәйем минең”, “Беренсе уҡытыусы” повестары.<br>2. 1963 – 1966 йылдар – халыҡ тарихын, революция, колхозлашыу осорон, һуғыш ваҡиғаларын һүрәтләгән “Әсә баҫыуы”, “Хуш, Гөлһары” повестары.<br>3. 1970 – 1977 йылдар – шәхес, шәхес һәм йәмғиәт бәйләнеше проблемаларын үҙәкләштергән “Әкиәттән һуң” |

| | | |
|---|---|---|
| | | (“Аҡ пароход”), “Иртә килгән торналар”, “Диңгеҙ буйлап йүгереүсе алабай” повестары, Ҡалтай Мөхәмәтйәнов менән бергә “Фудзиямаға ашыу” пьесаһы яҙылған осор.<br>4. 1980 – 1988 йылдар – юғарыла билдәләнгән бөтә проблемаларҙы – шәхес һәм тормош, халыҡ һәм тарих, намыҫ һәм йәшәйеш мөнәсәбәтен социаль-фәлсәфәүи планда асҡан романдар: “Буранлы ярымтуҡталыш, йәки Быуаттан да оҙон көн”, “Яҙалау урыны” әҫәрҙәре яҙылған осор. Уларҙа авторҙың донъяға киң ҡарашы сағылышы, заман проблемаларының үткер ҡуйылышы. Романдарҙың сюжет композиция үҙенсәлектәре. “Буранлы туҡталыш, йәки быуаттан да оҙон көн” романында Буранлы Иҙеүкәй, Ҡаҙанғап, Әбүталип образдары аша шәхес һәм йәмғиәт мөнәсәбәте проблемаһы ҡуйылышы. Заман ерлеге һәм фантастик мотивтар араһындағы бәйлелек. Романдың идея йөкмәткеһен асыуҙа фольклорҙың роле. “Яҙалау урыны” романынды Авдий Каллистратов, Бостон яҙмыштарына бәйле сюжет һыҙыҡтарының үҙ-ара мөнәсәбәте. Романда бүреләр образының әһәмиәте. Романдың лейтмотивтары булараҡ “яҙмш”, “намыҫ”, “ҡорбан”, “азатлыҡ” төшөнсәләре;<br>5. 1990-2008 йылдар – бөгөнгө заман, кешелек, глобалләшеү проблемаларын күтәргән “Кассандра тамғаһы”, “Тауҙар ҡолағанда” (“Мәңгелек кәләш”) романдары. Әҫәрҙәрҙең фәлсәфәүи нигеҙе. Кешелек цивилизацияһы ирешкән ҡаҙаныштар һәм юғалтыуҙар хаҡында яҙыусының уйланыуҙары. Кешелек йәмғиәте һәм тәбиғәт араһында тыуған конфликт. |
| 1.5 | Особенности развития татарской литературы | Татар халҡының килеп сығышы (этногенез) хаҡында белешмә. Татар әҙәбиәтен осорҙарға бүлеү мәсьәләһе. Уны 4 осорға бүлеп өйрәнеү:<br>1. Боронғо һәм урта быуат әҙәбиәте.<br>2. XIX быуат әҙәбиәте.<br>3. XX быуат башы әҙәбиәте.<br>4. XX быуат әҙәбиәте.<br>Ғабдулла Туҡай (1886-1913)<br>Халыҡ шағирының тормош һәм ижад юлы. Башланғыс осор ижадындағы мәғрифәтселек ҡараштары. Милләт тойғоларының шағир ижадына ыңғай йоғонтоһо, тормошҡа милләт яҙмышы күҙлегенән баһа биреүе. Шиғырҙарында реалистик тенденцияларҙың тәрәнәйеүе. Шағир ижадына Пушкин, Лермонтов, Некрасов, Толстой һ.б. йоғонтоһо. Туҡай һәм уҡыусы, халыҡ араһындағы мөнәсәбәттәр. Шәхси тойғоларҙы социаль, ижтимағи мәсьәләләр менән бәйләү оҫталығы. («Үкенес», «Өҙөлгән өмөт», «Ғазаптан һуң», «Кәңәш», «Китмәйбеҙ» һ.б.)<br>Туҡайҙың әхлаҡи сафлыҡ өсөн көрәше, миһырбанлыҡҡа, шәфҡәтлеккә ынтылышы, гуманистик идеяларҙың сағылышы. |
| 1.6 | Якутская и алтайская литература | Алтай әҙәбиәте<br>Борис Укачин (1936) – Алтай шағиры. Уның башланғыс |

| | | |
|---|---|---|
| | | ижадында кесе Ватан, тәбиғәт, алтай халҡы темаларының сағылышы (“Юлдар” шиғырҙар йыйынтығы (1960). “Нәсихәттәр”, “Кедр янында доға”, “Айыу башына сихыр” шиғырҙар цикында рухи ҡиммәттәр, әҡлаҡи ҡанундар сағылышы. Б. Укачин ижадында заман  һәм фольклорҙың йәнәшәлеге (“Алтай ҡаяларында яҙыуҙар” ). Таулы Алтай – атайсал (“Тау эйәләре” шиғырҙар йыйынтығы (1970)).<br>Павел Кучияк (1897-1943) тормошо һәм ижады. Алтай эпосын һаҡлауҙағы роле. Алтай фольклорын йыйыуҙағы эшмәкәрлеге. “Алтай әкиәттәре”, “Темир Сапаа”,”Алтын Тууди” һ.б. китаптары. Шиғриәт һәм проза өлкәһендәге өҙөби ижады. “Тимер ат”, “Тойсы” хикәйәләре, “Ен далаһы” повесының идея-тематик, художестволы үҙенсәлектәре. Драматургия өлкәһендәге эшмәкәрлеге. “Элмәк”, “Соҡор”, “Көтөлмәгән осрашыуҙар” һ.б. пьесаларында конфликт ҡуйылышы.  “Үтмәйһең”, “Ике гвардеец” пьесаларында алтай яугирҙарының батырлығын күрһәтеү. “Чайнеш” пьесаһында алтай халҡының революция, граждандар һуғышы осорондағы тормошо сағылышы. Павел Кучияк ижадының әһәмиәте.<br>Яҡут әҙәбиәте<br>Алексей Кулаковский (1877-1926) – яҡут яҙма әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, шағир, фольклорист, тел белгесе. Тормош һәм ижад юлы, ижтимағи эшмәкәрләге. А. Кулаковскийҙың хеҙмәттәре: “Яҡут мәҡәлдәре һәм әйтемдәре”, “Яҡут теле буйынса мәҡәләләр һәм материалдар” һ.б. А. Кулаковский шиғырҙарында яҡут халҡының рухи ҡиммәттәре сағылышы. “Яҡут ҡатындарының портреттары” поэмаһында композицияның портреттар галереяһы рәүешендә ҡоролошо. Әҫәрҙә яҡут ҡатын-ҡыҙҙарының художестволы образы, характерҙары сағылышы. “Шаман йоҡоһо” – социаль-фәлсәфәүи поэма. әҫәрҙә шағирҙың яҡут халҡының яҙмышы, замандың үткер проблемалары тураһында уйланыуҙары. “Аҡыл һәм йөрәк бәхәсе” поэмаһында психологик конфликттың ҡуйылышы. Яғут халҡының совет осоронда тормошон сағылдырған “Йәй етеүе”, “Ҡарт хикәйәһе”, “Самолет” һ.б. әҫәрҙәр. А. Кулаковский шиғриәтендә фольклор традициялары. А. Кулаковский ижадының әһәмиәте.<br>Софрон Данилов (1922-1993) тормош һәм ижад юлы. “Осрашыу” китабында армия тормошо сағылышы, тыуған йорт, тыуған ил алдында яуаплылыҡ мәсьәләләре. “Һинең дуҫтарың” повесында һуғыш йылдарында  яҡут ауылы тормошо темаһы. С. Данилов ижадында Манһары образы. А. Кулаковский йыйған материалдарға таянып, уның художестволы образын тыуҙырыу, “Манһары” повесында Манһарыны милли герой, ғәҙеллек, батырлыҡ, мәрхәмәтлек үрнәге итеп ҡарау.С. Данилов ижадында мәктәп темаһы. “Тибә йөрәк” романында йәштәр проблемаларының сағылышы. С. Данилов ижадында тарихи тема. “Һылыуҡай Амга” романында XX быуат башы тарихи  ваҡиғаларҙың, граждандар һуғышының һүрәтләнеше. Романда Ойунский, |

| | | |
|---|---|---|
| | | Аммосов, Байкалов кеүек тарихи шәхестәрҙең образы. С. Данилов ижадының әһәмиәте. |

Курс лекционных занятий

| № | Наименование раздела / темы дисциплины | Содержание |
|---|---|---|
| **2** | **Литература тюркских народов** | |
| 2.1 | Туркменская, балкарская, чувашская литература | Балҡар халҡы әҙәбиәтенең совет власы осоронда балҡар телендәге әлифба килеп сығыу менән барлыҡҡа килеүе. Балҡар әҙәбиәтенең үҙенең үсешендә халыҡ шиғриәте традицияларына һәм рус әҙәбиәте тәжрибәһенә таяныуы. Шиғриәттең төп роль уйнауы. К. Мечиевтың революцияға тиклемге йырҙарҙа һәм поэмаларҙа балҡар халҡының ғазап сигеүҙәрен һәм көрәшен кәүҙәләндереүе, совет власы дәүерендәге шиғырҙар хеҙмәткә һәм балҡарҙарҙың көнкүрешенә, халыҡ дуҫлығына арналыуы. К. Кулиевтың поэзияһына граждандлыҡ, лиризмдың хас булыуы. Уның әҫәрҙәрендә халыҡтың тарихи һәм рухи тәжрибәһе сағылыуы. Хәҙерге балҡар шиғриәтенә К. Отаров, С. Макитов, Т. Зомаҡулованың ҙур өлөш индереүе. Уларҙың әҫәрҙәрендә лирик геройҙар замандаштың донъя һәм заман менән ҡатмарлы, күп яҡлы бәйләнешен кәүҙәләндереүе. Әгәр балҡарҙарҙың беренсе әҫәрҙәре – 30-сы йылдарҙағы прозала – хикәйәләрҙә, повестарҙа халыҡ яҙмышының элекке һәм хәҙерге тормошо сағыштырылһа, хәҙерге этапта романдың килеп сығыуы, тематиканың киңәйеүе менән айырылыуы.<br>“Улып” – сыуаш халҡының эпик ҡомартҡыһы. Унда яуызлыҡ һәм изгелек көрәше идеяларының сағылышы. Улып, уның улдары образының сыуаш халҡы тарихына бәйләнеше. Эпоста грек мифологияһы мотивтары килеп инеүе. Халыҡҡа зыян һәм яза проблемаһы. Сыуаш халҡының донъяға ҡараштарының, милли характер үҙенсәлектәренең эпоста сағылышы.<br>Михаил Сеспель (1899-1922) тормошо һәм ижады. М. Сеспель ижадында сыуаш халҡының күтәрелеше, үҫеше идеялары: “Алыҫта баҫыуҙа”, “Сыыуаш”,”Море”, “Сыуаш халҡының улына”. Сеспель лирикаһының фольклор менән бәйләнеше (“Ҡыҙыл мәктәр”). Сспель ижадында художсетволы ваҡыт, арауыҡ һәм лирик герой. Сеспель – тәржемәсе.<br>Константин Иванов (1890-1935). Сыуаш шағиры һәм мәғрифәтсеһенең тормошо һәм ижады. К. Ивановтың тәржемә өлкәһендә эшмәкәрлеге: М.Ю. Лермонтов, Н.П. Огарев, А.В. Кольцов, Н.А. Некрасов шиғырҙарын тәржемә итеүе. К. Ивановтың әкиәттәре һәм балладалары. “Нарспи” поэмаһы – сыуаш халҡының социаль ғәҙеллек тураһында идеяларын сағылдырған поэма. Поэмала фольклор мотивтары, романтик һүрәтләүҙәр. Поэмала сыуаш халҡының әхлаҡ ҡанундарының сағылышы, Сетнер һәм Нарспи образдары. К.Иванов – рәссам һәм скульптор. |

| | | |
|---|---|---|
| | | Яков Ухсай (1911-1986) тормошо һәм ижады. Сыуаш, башҡорт, татар фольклоры менән ҡыҙыҡһыныуы. “Бәхет юлы”,”Көмөш йөҙөк” экиәттәрендә фольклор мотивтарының сағылышы. Я. Ухсай ижадында Бөйөк Ватан һуғышы темаһы. “”Н дивизияһында хеҙмәт иткән сыуаш яугир һәм командирҙарҙың туған халҡына хаты” поэмаһында публицистик һыҙаттар. “Кельбук ҡарт”, “Артылыш” поэмаларының художсетволы үҙенсәлектәре, оҫталыҡ мәсьәләләре.Я. Ухсай публицистикаһы. |
| 2.3 | Карагалпакская, азербайджанская литературы | Ҡарағалпаҡ әҙәбиәтенә байҡау.<br>Әзербайжан әҙәбиәтенә байҡау.<br>Балҡар әҙәбиәте үсеше.<br>Балҡар әҙәбиәте классигы Ҡайсын Кулиев ижады. «Ғәжәпләнеү йәшәү», «Эльбрус», «Һыбай», «Бейеклек бит күренә йыраҡтарҙан…», «Һабаҡ алдым ерҙән, күктән дә мин…», «Ҡылыс һәм сәскә», «Көндән-көн юл ауырлаша бара…», «Чегемда ҡар яуа», «Сыҙамлыҡ», «Аҡ ҡарҙа ҡара ат йән бирә», «Ҡояшҡа рәхмәт әйтәм» һ.б. шиғырҙарының лирик-философик асылы. |
| **1** | **Истоки литературного наследия** | |
| 1.1 | Истоки литератур тюркских народов | Төрки халыҡтары әҙәбиәтендә уртаҡ художестволы традициялар. Шиғриәттә, сәсмә әҙәбиәттә ҡалыплашҡан формалар: ғәзәл, мәснәүи, робағи, ҡитға, ҡасидә, хәмсә, нәзирә, ҡисса, хикмәт, хикәйәт һ.б. Нормаға, ҡалыпҡа эйәреү тенденцияһы.<br>Боронғо төрки шиғыры.<br>Төрки халыҡтары әҙәбиәтендә уртаҡ тематик йүнәлештәр: героик-эпик йөкмәткеле әҙәбиәт; дини әҙәбиәт (шул иҫәптән суфыйсылыҡ, кәрәмәтлек, хуруфизм); сәйәхәтнамә, тәүарихтар, дастандар. |
| 1.2 | Эпосы тюркских народов. | «Кобланды батыр» эпосының ҡаҙаҡ халҡында ерләшкән сюжеты, йөкмәтке үҙенсәлектәре. Идеаль геройға мөнәсәбәт.<br>«Манас» эпосы. Ҡырғыҙҙарҙа манассылар традицияһы. Уның генезисы, донъя мәҙәниәтендә биләгән урыны.<br>Ҡалмыҡтарҙа таралған «Джанғар» эпосының философик ҡараштары, буддизм йоғонтоһо.<br>«Гер оглы» («Кер-оглы») эпосының әзербайджан, төркмән халыҡтарында киң таралған сюжет үҙенсәлектәре. |